*Приложение №2*
*к рабочей программе по изобразительному искусству, утв. пр. № 116 от 29.08.2022 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево
_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

# Контрольно-измерительные материалы промежуточной аттестации и критерии оценивания

родной язык (башкирский)
название курса

| | |
|---|---|
| Уровень общего образования (начальное, основное, среднее) | основное |
| Класс | 7,9 |
| Учителя: | Фахруллина Г.А., Магданова Д.М. |

2022 г.

**Туған башҡорт теленән**
**контроль-үлсәү материалдар**

7 класс

Тикшереү диктанты

Ҡош юлы

Был хәл күптән булған.Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош юлы ла яралмаған, ти. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Урал тауы, Һаҡмар, Ағиҙел йылғалары буйҙарына торналар килеп йәйләр булған.

Бер йылды торналар йылы яҡҡа осҡан ваҡытта, ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша, ҡайһылары арып, ергә төшә башлаған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтең өсөн, ҡауырһындарын күк йөҙөнә сәскән. Улар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар барлыҡҡа килгән. Ҡош юлы исеме шунан ҡалған. Рустар Ҡош юлын Млечный путь тип исемләгән. Уға хикәйәт тә сығарған. (85 һүҙ.)

1. Ябай һөйләмдәрҙе табырға, синтаксик анализ эшләргә.
2. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табырға.

( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Контроль диктант

Шәжәрә

Шәжәрә – ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән. Шәжәрәгә ырыуҙың ирҙәр исеме генә индерелгән һәм уларҙы иҫтә тотоу талап ителгән. Нәҫел-ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән.

Үҙеңдең шәжәрәңде белеү ғәҙәте башҡорттарҙа бик борондан һаҡланып килгән, элек 7 быуыныңды белеү ғәҙәти хәл булған. Хатта ата-бабаларын 10-12 быуынға тиклем белеүселәр бар.

Халыҡ тарихын өйрәнеүҙә шәжәрәләрҙең әһәмиәте бик ҙур.

1. Беренсе һөйләмгә синтаксик анализ яһарға.
2.Ете һүҙен килештәр менән үҙгәртергә.

( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Контроль диктант

Ағиҙел

Ағиҙел – республикабыҙҙың иң ҙур йылғаһы. Урал тауы итәгенән башланып, ул Башҡортостан аша 1400 километр самаһы ер үтә һәм бик күп йылғаларҙың һыуын үҙенә йыя.Ағиҙел буйында Белорет, Күмертау, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө ҡалалары теҙелгән. Колхоз, совхоз баҫыуҙары йәйелеп ята.

Ағиҙелдә иген, ағас, нефть һәм пассажирҙар тейәгән ҙур пароходтар,теплоходтар, баржалар, катерҙар йөрөй. Йылғаның аҡ тулҡындарына, бейек ҡаяларына, унда үҫкән

ҡалын урмандарына, йәшел туғайҙарына һоҡланмаған кеше юҡ. Бына ниндәй ул йылғалар әсәһе Ағиҙел!

1. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең аҫтына һыҙырға.
2. Йылға һүҙенә фонетик анализ яһарға.

( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Контроль диктант

Ете

Әҙәмде донъяла шул етелек уратып тора кеүек: өҫтә ете ҡат күк, аҫта ете ҡат ер. Күктә ете йондоҙ, ерҙә ете мәғдән. Аҙнаның ете көнө, йәйғорҙоң ете төҫө, моңдоң ете өнө. Ете мөғжизә.

Әкиәт батырҙары ете юл сатында ете башлы аждаһаны еңгән, ете төн уртаһында шашынған ен-пәрейҙәрҙе ҡыйратҡан. Сер булһа, уны ете йоҙаҡ менән бикләгәндәр, хазинаны ете ҡат һандыҡ эсендә һаҡлағандар. Иң ҡаты яза итеп ете ҡат тиреһен тунағандар. Батырҙар ете диңгеҙ, ете тау гиҙгән. Бәхетлеләр ете йәннәт ишеген асып ингән. Мөхәббәтлеләр төнөнә ете ҡат уянған. Еңелгәнде етегә бөкләп һалғандар. Етегә еткәндәр йә уңғандар, йә туңғандар.

Кешенең тирә-йүне, ғүмере серле ете менән тулы кеүек. Ғәжәп хикмәтле лә, серле лә ул.

1.Тиң киҫәкле ябай һөйләмдәрҙе табырға.
2.Бикләгәндәр һүҙен составы буйынса тикшерергә.

( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Контроль диктант

Яҙмыштар

Һәр бер өй – күпме яҙмыштар төйөнө. Ауыл өйҙәре үҙҙәре генә күпме ул-ҡыҙҙар үҫтереп, ҡош балалары шикелле уларҙы ҡайҙарға ғына осороп ебәрмәгән. Шунда тыуып, шунда ғүмер итеп киткәндәре бихисап. Һәр өйгә ҡайғыһы ла, шатлығы ла инеп сыға. Яҙған ризыҡ алына, татыр рәхәттәр татыла, күрер михнәттәр күрелә, сырхау, ғазаптары кисерелә.

Кешем, мин һинең хаҡта уйлайым. Һин күпме ишектәрҙе асаһың, төрлө яҙмыштарҙы бәйләйһең. Йөрәгеңдә ниндәй усаҡ утын йөрөтәһең, яңы өйҙәргә ниндәй ут-ялҡындар илтәһең? Әсә һөтөнән, усаҡ ҡуҙынан һинең йөрәккә күскән утта йылыныусылар барҙыр, тим. Туң күңелдәрҙе иретәһе, өшөгәндәрҙе йылытаһы ла бар бит. Өйөңдә лә, йөрәгеңдә лә һүндерә күрмә утыңды, кешем.

1.Йорттар һүҙенә фонетик анализ яһарға.
2. Өндәш һүҙҙәрҙе табып, аҫтына һыҙырға.

( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Изложение

Йәштән сыныҡырға кәрәк

Һәр бала сабый саҡтан уҡ яҡшы холоҡло булып үҫергә тейеш. Ыҫпайлыҡ һәм йыйнаҡлыҡ ,эшсәнлек һәм тырышлыҡ кеүек яҡшы ғәҙәттәрҙе кесе йәштән уҡ үҙеңдә тәрбиәләргә кәрәк.Бындай һәйбәт сифаттарға эйә булған кешене һәр кем хөрмәтләй,яҡын итә.Һәр бала ҙурҙарға ихтирамлы,бәләкәйҙәргә иғтибарлы булһын.Әҙәпле бала ололар менән һәр саҡ үҙе башлап иҫәнләшә,хәйерле иртә,тыныс йоҡо теләй.

Кешене хеҙмәт тәрбиәләй,сыныҡтыра,рухи яҡтан байыта.Үҙ хеҙмәтең һалынған һәр әйбер ҡиммәтле лә,ҡәҙерле лә була. Шуға күрә кеше эш яратырға,хеҙмәткә күнегергә тейеш.

Өйҙә лә,эштә лә ныҡлы режим булдырырға кәрәк.Режим кешене тәртипкә өйрәтә,теүәллеккә ғәҙәтләндерә.Иртәнсәк билдәле ваҡытта торорға,билдәле ваҡытта дәрес әҙерләргә,уйнарға,ашарға,файҙалы эш менән шөғөлләнергә кәрәк.Теләк булыу йәки булмауға ҡарап,ҡыйын эштәрҙе һуңға ҡалдырыу кешене биҙәмәй,ә йәмһеҙләй генә.

1. Текст буйынса план төҙөргә.
2. План буйынса һөйләргә.
( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

## Изложение

### Ирекле онотоп булмай

Иртә менән ишек алдына сыҡҡайным. Шунда өшөп бөткән бер ҡошсоҡто күреп ҡалдым. Ул башын ҡанат аҫтына тыҡҡан да,хәрәкәтһеҙ ята ине. Мин уны устарыма алдым да тиҙерәк өйгә йүгерҙем. Ҡош үлмәгәйне әле. Аҙ ғына йылынғайны, мөйөштән-мөйөшкә оса башланы. Мин уны ҡабат тотоп алып,күкрәгемә ҡыҫтым,ул тынысланды .Өйгә тиҙ эйәләште,өйҙәгеләрҙән бөтөнләй ҡурҡмаҫ булды. Беҙ ҡышты уның менән бик күңелле үткәрҙек.

Яҙ етте,ҡояш ҡыҙҙыра башланы,быға тиклем һайрамаған беснәк,ҡанаттарын йәйеп,һайрай башланы. Ул ирекле һағынып йырлай ине.

Бер нисә көндән һуң беснәкте алдым да,тышҡа сыҡтым. уны юғары күтәреп осороп ебәрҙем. Ул баш осомда бер-ике әйләнде лә зәңгәр һауаға күтәрелеп юҡҡа сыҡты. Ул ошо китеүҙән кире ҡайтманы.Күрәһең,ул бәхетлелер. Ирекле онотоп буламы һуң.

1.Тексҡа план төҙөргә.
2.План буйынса әңгәмә үткәрергә.
( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

9 класс

## Тикшереү диктанты

### Көҙҙөң беренсе айы

Октябрь – көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Әсе һыуыҡ елдәр иҫә. Иртәнге һыуыҡтар көсәйә ҡырауҙар төшә. Күләүектәр таңғаса боҙ менән ҡапланған була. Йыш яуған һалҡынса ямғырҙар арҡаһында октябрҙе халыҡта “батҡаҡ айы” тип тә атайҙар. Тәүге ҡар яуа, ләкин ул шунда уҡ ирей. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡар ятып та ҡуя.

Күлдәр, быуалар, йылғалар туңа башлай. Иң аҙаҡҡы күсмә ҡоштар китеп бөтә. Иң һуңғы булып сәүкәләр, өйрәктәр китә. Уларға алмашҡа ҡыҙылтүштәр, беҙҙең яҡтарҙа

ҡышлаусы бүтән ҡоштар килә. Ныҡлап һыуыҡ төшөү менән, айыу, бурһыҡ, алйырҙан йоҡоға тала.

Баҡсаларҙа ағас ултыртыу дауам итә. Япраҡтар тулыһынса ҡойолоп бөтә, тәбиғәт ҡышҡа әҙерләнә. Тиҙҙән аҡ бурандары,ыжғыр елдәре, ынйы ҡар бөртөктәре менән һағынып көткән ҡыш та килеп етер.

1. Беренсе һөйләмгә синтаксик анализ яһарға. ( ОГЭ-ға әҙерлек буйынса эш төрө- подготовка к ОГЭ)
2.Ҡыҙылтүштәр һүҙенә фонетик анализ яһарға.
( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Контроль диктант

Урманда

Мин көҙгө урманда йөрөргә яратам. Уның иң гүзәл сағы сентябрь бөткәндә,октябрь баштарында булалыр.Үрмәксе ауҙары иренеп кенә йөҙгән зәңгәр күккә,йылы аяҙ көнгә,урмандың төрлө биҙәк хазинаһына һоҡланып туя алмайһың. Тәрән тынлыҡ .Аяҡтарыңды ергә түшәлгән алтын япраҡтар иркәләй. Ә ағастар? Ниндәйҙер оло ҡарағай йәки имән ышығында үҙенең ҡыҙыллы-һарылы сыбар кейемендә йәш саған ҡупшыланып ултыра. Тағы сыбар биҙәкле япраҡтарға һарыҡҡан асыҡ ҡыҙыл емештәре менән ҡыштырлап миләш тора. Уҫаҡтың уҫағына тиклем:”Ҡарағыҙ,мин бына ниндәй!”-тигән һымаҡ,йәйғор буяуҙары менән күҙҙәрҙе ҡамаштыра.

Көҙгө урмандың гүзәллегенә күңелеңде рәхәтләндереп йөрөй бирәһең дә кескәй аҡланға килеп сығаһың,уның тәрән тынлығын тыңларға ултыраһың. Шунда татлы хыялдарға күмелеп киткәнеңде үҙең дә һиҙмәй ҡалаһың. Урманда ифрат рәхәт шул!(Д.Исламов.)

1.Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе табырға. ( ОГЭ-ға әҙерлек буйынса эш төрө- подготовка к ОГЭ)
2. Билдәле эйәле һөйләмде табып, аҫтына һыҙырға.
( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Контроль диктант

Күп йылғалар башы

Башҡортостандың йөҙөк ҡашы булған Ирәмәл тауы Белорет, Учалы райондары һәм Силәбе өлкәһе сиктәрендә ята. Ул ике түбәнән тора. Оло Ирәмәл 1582 метр бейеклэктә, Кесе Ирәмәл- 1449 метр. Ирәмәл- күп йылғалар башы, Башҡортостаныбыҙҙың төп йылғаһы Ағиҙел унан баш алған йылғаларҙан хасил. Ирәмәлдә төрлө тәбиғәт күренештәрен күҙәтергә мөмкин: бында тау- урманлы, ялан, таулы тундра һәм яланғас тау бушлыҡтарын осратырға була.

Ирәмәлдә һауа торошо ҡапыл үҙгәреп тора. Томанлы көндәр йылына 200 көнгә етә, шуға ла бында килгән туристар һәм урындағы халыҡ араһында “Ирәмәл үҙенә килгән һәр кешене лә ҡабул итмәй”, тигән ырым йәшәй.

Ирәмәл тауы Мостай Кәримдең “Өс таған” повесы буйынса балаларға яҡшы таныш. Өргөн ауылынан сыуаҡ көндәрҙә Ирәмәл күренеп тора. Ул повеста Һүрәтләнгән Ҡылыс, Ҡалҡан күлдәре, ысынлап та, Учалы районында ята. Килегеҙ, үрегеҙ , ниндәй матур урындар бар беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа!

1. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табып, аҫтына һыҙырға. ( ОГЭ-ға әҙерлек буйынса эш төрө- подготовка к ОГЭ)
2. Теҙмә ҡушма һөйләмде табырға, аҫтына һыҙырға.
( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

## Контроль диктант

### Һыу буйында

Иртә менән беҙ уянғанда, тутыйғош ҡойроғо кеүек төрлө төҫлө нурҙар тау баштарын, күк йөҙөн алһыу төҫкә мансый башлағайны, ә йылға үҙәне, һәт тултырып ҡуйған шикелле, аҡ томан менән ҡапланғайны. Беҙ сәй эскеләп, нәмәләребеҙҙе кәмәгә тейәгән арала, томан күтәрелә башланы. Беҙ ҡуҙғалдыҡ, ләкин бик ҡыҙыу барғы килмәй. Ысынлап та эргәндә генә ҡалған ҡаяларҙы, яр буйындағы уйҙыҡ-уйҙыҡ һоҡланғыс туғайҙарҙы, йылғаның бөтә йәмен күрмәй уҙып китке килмәй. Моғайын, Илғужа быны аңлап алғандыр. Ул кәмәһен әкренәйтә, тын ҡалып, осраған бер нәмәне: йылға бормаларын, ҡырсынлы утрауҙарҙы, һыу аҫтындағы күренер-күренмәҫ кенә ятҡан ҙур-ҙур таштарҙы- бөтәһен дә күңелендә һеңдереп ҡалырға теләгәндәй ҡарап бара.

Беҙ, һәр ҡайһыбыҙ үҙ уйҙарыбыҙға сумып, тирә-яҡты күҙәтәбеҙ. Оҙаҡламай күп төрлө легендалар тыуҙырған Инсебикә ҡаяһына килеп еттек. Ниндәй мөғжизәле күренеш!

1. Хәл әйтемле ябай һөйләмде табырға. ( функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)
2. Инсебикә һүҙенә фонетик анализ яһарға. ( ОГЭ-ға әҙерлек буйынса эш төрө- подготовка к ОГЭ)

## Контроль диктант

### Тәбиғәт.

Беҙҙең урмандарыбыҙ бай, үҙенсәлекле. Беҙҙең бурысыбыҙ – ошо байлыҡты киләсәк быуынға еткереү, йәғни һаҡлап ҡалыу. Юғиһә, киләсәктә ағастар, ҡыуаҡтар, шифалы үләндәр, ҡоштар һәм йәнлектәрҙе беҙҙең балаларыбыҙ һүрәттән генә ҡарап ултырыр. Ә бит тәбиғәт ҡосағында ял итеү – үҙе бер мөғжизә, иҫ киткес ял!

Йыһан ҡеүәтен күпләп йыйып, уны йәлләмәйсә еңел генә тирә-яҡҡа таратып, үҙенең запастарын бик тиҙ тулыландырыусы ағастар “донор ағастар”, тип атала. Тап ана шундайҙарҙың береһе булған ҡайын тураһында булыр һүҙ.

Ҡайын – бик үҙенсәлекле ағас.Уның бейеклеге 20 метрға етә. Дауалау өсөн бөрөләре һәм япраҡтары, һуттары ҡулланыла. Улар составында фитонцидтар, микроэлементтар, витаминдар, шәкәр һ.б. биологик актив матдәләр бар. Ҡайын дауалары бик көслө, һәр кемгә лә килешеп бармай. Шуға ла дауаланыу курсын табип күҙәтеүендә, уның

күрһәтмәләренә ярашлы ғына үтеү мотлаҡ. Тәбиғәтебеҙҙе һаҡлайыҙ, ул беҙҙең иң төп байлығыбыҙ.

1.Кайын һүҙенә фонетик анализ яһарға. ( функциональ грамоталылыкты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)
2. Ике составлы һөйләмдәрҙең аҫтына һыҙырға. ( ОГЭ-ға әҙерлек буйынса эш төрө- подготовка к ОГЭ)

Изложение

Изге байрам

Иң ҙур байрамыбыҙ - Еңеү байрамын ҡаршыларға әҙерләнгән көндәрҙә генә уларҙың пионер дружинаһы шундай ҡарар ҡабул итте : мәктәптә фронтовиктарға арналған музей булдырырға. Уҡыусылар ҙа бик теләп ҡатнашты был эштә. Дөрөҫ, уның Илғужа олатаһы һуғышта булмаған, һунарҙа бәләгә осрап ҡуя. Уның ҡарауы, Фәғилә өләсәһе фашистарға ҡаршы барған үлемесле яуҙа ҡатнаша, шәфҡәт туташы булып яу юлдары үтә, күп кенә яугирҙарҙың ғүмерен ҡотҡарыша. Ләкин дошман пуляһы берҙән-бер көндө Әсләмдең өләсәһенең дә ғүмерен өҙә шул...

Әсләм ошо ваҡиғалар хаҡында бик яҡшы белә. Өләсәһе һәләк булғас, уның бер яуҙаш әхирәте уларҙың өйөнә хат яҙып ебәрә. Ҡулына мылтыҡ тотмаһа ла, батыр һуғышсы була Фәғилә өләсәһе, йөҙәрләгән яралыны ут эсенән алып сыға, уларға ғүмер бүләк итеүгә үҙ өлөшөн индерә. Тик,ҡыҙғаныска ҡаршы, командирын һөйрәп артҡа шыуышҡан сағында , дошман пуляһынан үҙенең ғүмере өҙөлә.

Әле Әсләм обелиск ҡаршыһына баҫып, үҙенә бер асыш яһаны : һуғышта ҡулға мылтыҡ тотмайынса ла фашистарҙан үс алып булған икән дә. Тимәк, уның да өләсәһе герой булған! Әсләм уның исеменә тап төшөрмәҫ, яҡшы уҡыр, киләсәктә Тыуған иленә фвйҙалы кеше булыр.

1.Текста нимә тураһында һүҙ бара? План төҙөргә .
( ОГЭ-ға әҙерлек буйынса эш төрө- подготовка к ОГЭ)
2.Эйртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе табырға.
(функциональ грамоталылыкты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

Изложение

Һаулыҡ- ҙур байлыҡ!

Гөлғәйшә инәй улы һау саҡта ыңғыр - шыңғыр ғына йөрөгән ҡарсыҡ ине, йыш ҡына башы ауыртыуға, биле һыҙлауға зарлана торғайны. Фәрит больницаға ингәндән һуң, ул үҙенең зарҙарын бөтөнләй онотто. Уның уйында тик улы ғына- Фәрите генә булды.

Бер көндө Гөлғәйшә инәй :Нимә бешерһәм, күңелеңә хуш килер икән?”- тип һорағас, Фәрит: “Һөтләп, мәтрүшкә сәйе эскем килә”,- тигәйне. Гөлғәйшә инәй, ҡаланы бер итеп эҙләп тә, мәтрүшкә таба алмағас, ауылға сығып китте. Килененең: “Әсәй, яфаланып йөрөмә, көндәр аҙыраҡ асылғас барырһың”,- тиеүенә лә ҡолаҡ һалманы.

Икенсе көндө аш үтмәй йонсоған улы мәтрүшкә сәйе менән бер картуф бәрәмәсен ашағас: “Ярай әле, ауылға барып, табып алып ҡайттым”,-тип шатланды.

Өсөнсө көн Лира ҡәйнәһенә: “Хәҙер бөйөрө шешкән ауырыуҙарға икенсе кешенең бөйөрөн күсерәләр икән”,- тип ысҡындырғайны, шуны Гөлғәйшә инәй ауыҙынан һис төшөрмәй. “Мин инде ашын ашаған, йәшен йәшәгән. Фәриткә минең бөйөрөмдө алып ҡуйһындар. Врач менән һөйләш әле”,- тип ялына ул килененә. Әлбиттә, һәр әсәгә балаһы ныҡ ҡәҙерле шул.

1.Тура телмәрле һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөргә. ( ОГЭ-ға әҙерлек буйынса эш төрө- подготовка к ОГЭ)

2. Тиң киҫәкле һөйләмде табып, аҫтына һыҙырға.
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш- задание по функциональной грамотности)

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары**

Яҙма эштәр балаларҙың белем һәм күнекмәләрен тикшереү маҡсатында үткәрелә. 5-9 кластарҙа тикшереү эштәренән контроль күсереп яҙыу, һорауҙарға яуаптар, диктант, инша, изложение үткәрелә. Уҡытыу рус телендә барылған мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре лә, яҙма эштәр үткәреү методикаһы ла бик үҙенсәлекле. Шуға ла яҙма эштәр, уларға ҡуйылған баһалар балаларҙың телгә өйрәнеүендә дәртләндереү сараһы булып хеҙмәт итһен. Уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләр күләме, сифаты башҡорт теленән дәүләт стандарттарына яуап бирергә тейеш. Был иһә ижади эшләүҙе талап итә.

Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, уҡыусыларҙан яуап алыу, уларҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса белемдәрен, белеүҙәрен һәм күнекмәләрен тикшереү,иҫәпкә алыу,шуның менән бергә, алған белемдәргә таянып, тел берәмектәренә,күренештәренә аңлатма бирергә өйрәтеү алымдарының береһе иҫәпләнә.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш ителергә тейеш:

1. Яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
2. Үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
3. Яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының телдән биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөн логикә эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға,яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә, билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

1. тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел һәм әҙәбиәт төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;
2. үтелгән материалды тулы аңлауын, белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;
3. Материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, уның яуабы «5» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп

барһа,телендә,телмәр төҙөлөшөндә һирәк-һаяҡ яңылышлыҡтар китһә,уның яуабы «4» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә, ләкин:

1. Материалды тулы аңлата алмаһа, төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;
2. әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә,үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;
3. Яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа,телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа,уның яуабы «3» билдәһе менән баһалана.

Диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.
Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.
Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.
Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:
1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: ата урынына аша).
Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.
Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:
1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
Диктант бер генә билдә менән баһалана.
«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла..
Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.
Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,
«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

| Эш төрҙәре | Кластар | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| Контроль эштәр | 4 | 4 | 4 | 4 | 4 |
| Диктант | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| Изложение | 1 | 1 | 2 | 2 | 2 |

Изложениеларҙы баһалау

"5" Яҙма эштең йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә, фактик хата булмаһа,эш лексик яҡтан бай булыуы менән айырылып торһа, телмәр тасуири булһа, бер генә телмәр хатаһы һәм бер генә йөкмәтке хатаһы булған яҙма эшкә ҡуйыла.
"4" Йөкмәтке дөрөҫ бирелһә, әммә эштә бик аҙ булһа ла фактик хаталар осраһа, төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлешендә тупаҫ булмаған етешһеҙлектәр генә булһа, 2 орфографик хата, йәки 1 орфографиу һәм 3 пунктуацион хата булғанда ҡуйыла.
"3" Төп фекер дөрөҫ аңлатылһа, әммә эштә фактик хаталар ебәрелгән булһа, яҙма эш бер төрлөрәк синтаксик конструкцияларҙан торһа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙа хаталар булһа, телмәр хаталары 5-тән, йөкмәтке хаталары 4-тән артмаған булһа ҡуйыла.
"2" Яҙма эш темаға тура килмәһә, фактик хаталар күп булһа, эштең бөтә өлөштәрендә лә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлелеге боҙолһа,текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмаһа,планға ярашһыҙ булһа, ҡыҫҡа һөйләмдәрҙән торһа,телмәр хаталары 7-нән, йөкмәткеһендәге хаталар һаны 6-нан артмаған хәлдә ҡуйырға мөмкин.

**Һаулыҡ буйынса мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусылар өсөн баһалау формалары.**

***Уҡыу һәләтлектәрен баһалау:***
40-50 һүҙ 120-150 билдә 50-65 һүҙ-эстән уҡыу.
Яҙма эштәр: бирелгән текстарҙы күсереп яҙыу-40-50 һүҙ.
һүҙлек диктанты:15-20 һүҙ,

***Күсереп яҙыу бер генә билдә менән баһалана*.**
**«5»**-хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1орфографик, 2пунктуацион хата булған эшкә**.**
**«4»**-2 орфографик, 2 пунктуацион , 1орфографик, 3 пунктуацион.
**«3»**- 4 орфографик, 4пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион,
**«2»**- 9 орфографик, 9 пунктуацион.
**«1»**- уҡытыусы ҡарамағында.

**Телдән яуаптарҙы баһалау:**

**“5” билдәһе ҡуйыла:**

-әгәр материалды аңлап, тулы яуап ҡайтарһа;

- белемен практик ҡуллана алһа ,аңлата белһә;

**“4” билдәһе ҡуйыла:** яуабында 1-2 хата яһап,үҙе төҙәтһә;

**“3” билдәһе ҡуйыла:** материалды аңлауын күрһәтһә, әммә

- тулы асып бирә алмаһа, төшөнсәләрҙә хаталар ебәрһә;
- үҙ фекерен миҫалдар менән нигеҙләй алмаһа;